*Миңниса БАҺУМАНОВА*

# КӨСЛӨ ЗАТ



*Флүрә Аҙнабаева*

Ҡайһы саҡ беҙҙең арала шундай ҡатындар осрай: нисә йылдар үтһә лә, шул көйө һөйкөмлө, итәғәтле, уңған, ә иң мөһиме — матур характерлы булып ҡалалар. Ваҡыт саңы ла ҡағылмай уларға, хатта шәхси тормошон, эшләгән эштәрен белмәһәң, уларҙы үҙ-үҙен генә ҡарап йөрөгән «тәтәй апайҙар» иҫәбенә индереп ҡуйыуың бар. Бына шундай күркәм кеше беҙҙең Флүрә Фәтхи ҡыҙы Аҙнабаева. Атаһы Фәтхи ағай йәшәүҙән йәм, хеҙмәттән тәм табырға өйрәтеп кенә ҡалмаған, үҙенең уҡытыусылыҡ эшен ҡыҙына аманат итеп ҡалдырған. Иптәштәренең йә ауылдаштарының атаһы тураһында бер кәлимә яҡшы һүҙ әйтеүе еткән Флүрәгә. Осоноп-ҡанатланып киткән ҡыҙыҡай төндәр буйы йоҡлай алмай, атаһы кеүек уҡытыусы булырға теләп, эскерһеҙ пландар ҡорған. Егәрле лә, абруйлы ла, шул уҡ ваҡытта һабыр ҙа булғыһы килгән уның.

— Ауылда иң ҙур, абруйлы кеше уҡытыусы бит инде, инженер, табип һөнәрҙәре уйға ла инеп сыҡманы, беҙ хатта уларҙың барлығын да тойманыҡ, — ти Флүрә апай үҙе был хаҡта.

Силәбе өлкәһендәге Арғаяш районының Туҡтыбай ауылында тыуған ул. Һуғыш ваҡытында һәм унан һуңғы осорҙа ил кисергән ҡыйынлыҡтар уның ауылын да урап үтмәгән. Өлкәндәр эштә саҡта ваҡ бала-саға ҡара яҙҙан алып ҡара көҙгәсә ялан ҡыҙырып тамаҡ ялғау сараһын күргән. Ә унан һуң сыр-сыу килеп һыу ингәндәр...

— Эй, бала саҡ, сабый саҡ...

Флүрә апай Ағиҙел боҙҙан әрселгән мәлдәрҙә бигерәк болоҡһоп китә лә, туғандарын, бала сағын, атаәсәһен һағынып, теләнән төшөрмәй башлай. Эш эш инде, ә бына эштән ҡайтҡанда Ағиҙел күҙенә салындымы, уйҙары бер ваҡиғаға бара ла төртөлә.

— Бик тә матур ҡояшлы йәй көндө булды ул хәл. Һәр ваҡыттағыса бала-саға һыу ҡойона ине. Ҡояш нурҙары һыу өҫтөндә ут ялҡыны кеүек йүгерә. Һикереп төш тә йөҙ ҙә кит. Ә мин яр башында ултырам. Мейәстең көслө ағымдарын еңерлек хәлем дә, батырлығым да етмәҫ төҫлө. Шул тиклем баҙнатһыҙ, сибек кенә инем. Ә һеңлем Фирая саяланып һыуҙа балыҡтай йөҙә, етмәһә



*Әхмәр менән Флүрә Аҙнабаевтар*

бер туҡтауһыҙ: «Апай, әйҙә төш, үҙем ярҙам итермен, эргәңдә генә йөҙөп барам», — тип ныҡыша. Түҙмәнем — төштөм. Уға ныҡ ышанғанмындыр инде, күрәһең. Мейәстең уртаһына ғына еттем тигәндә бата башланым, етмәһә, ауыҙға һыу тулып, сәсәп тонсоға-тонсоға ҡул-аяғымды болғайым тигәнсе, һыу төбөнә китә яҙҙым. Ҡайһы аралалыр һеңлем ҡулымдан тартып алды ла ярға сығарып та ҡуйҙы. Шундай сая ине һеңлем Фирая. Бына нисәмә йыл инде лейкемия сиренән яфалана.

Флүрә апай шуға ла үҙ-үҙенә яҙылмаған бурыс алған, күрәһең: һеңлеһе, туғандары, таныштары өсөн тырышырға. «Ижади ҡомарың һүнмәһен. Һаулығың — һинең байлығың», — тип бергә эшләгән иптәштәре йыуатҡан саҡтарҙа бигерәк тә тоя ул ошо бурысын.

1957 йылдың 29 сентябрендә «Маяҡ» химкомбинатында шыйыҡ реактив ҡалдыҡтары һаҡлағысы «Силәбе - 40» аварияһы һөҙөмтәһендә Силәбе, Свердловск, Төмән, Ҡурған өлкәләренең 217 ауылы хәүеф зонаһында ҡалғайны. Әле 1949 йылда уҡ радиоактив ҡалдыҡтар Ҡарасәй һәм Иҫке Һаҙлыҡ күлдәренә түгелгән, Тинес йылғаһына ағыҙылған булған. 1949-1957 йылдар һуҙымында, донъя йәмәғәтселегенән йәшереп, халыҡты ағыуларҙар тип кем уйлаһын. Әле лә ул ҡолаҡҡа яҡмаған хәбәргә оҡшап китә, әммә уның зыянын үҙҙәре кисергәндәр генә яҡшы беләләр. Ниндәй ҡөҙрәт аралағандыр бала саҡтан уҡ сибек, ауырып ҡына барған Флүрә апайҙы, шөкөр, ул инде оҙон, матур ғүмер кисергән. Ә һаусәләмәт Фирая һеңлеһе ғүмер буйы интегә, һыҙлана, күрәһең, һыу инергә яратыуы быға сәбәпсе булғандыр. Радиация нурҙары уның тәне аша еләктәренә уҡ үтеп ингәндер. Һеңлеһен йәлләгән көндәрендә әсәһе Ҡәләмшә инәй йырлаған бер моңло йыр күңелендә һулҡылдап тыуа башлай:

> Мейәс кенә буйы бигерәк матур,
> Тапатҡы ла килмәй аттарға.
> Әскенәйем тулы ҡайғы-хәсрәт—
> Белгертке лә килмәй яттарға.
> Мейәс кенә буйы, әй, ҡыҙылъяр,
> Ҡыҙыл тураҡайым юшайҙыр.
> Билемә лә бәйләгән , әй, билбауым
> Ҡайғы-хәсрәт менән бушайҙыр.

Флүрә Фәтхи ҡыҙы бирешмәне, был тоҙаҡтан оло тормошҡа, ғилемгә юл йырып сыҡты, шуға күрә һаулығын оло бәхет тип иҫәпләй.

«Тормош — көрәш» икәненә ул күптән инанған инде. Әле мәктәпте тамамлап, Троицк ҡалаһындағы татар-башҡорт педагогия училищеһында уҡып йөрөгәндә тағы бер милли катастрофа кисерә ул. 1962 йылда башҡорт мәктәптәрен урыҫлаштырыу башланғас, унда уҡып йөрөгән балалар ауылдарына ҡайтарып ебәрелә. Радиация менән ғүмерҙәрен тартып алһалар, уҡыу йорттарын ябып, уларҙы урамға сығарып ташлағандар.

Йәштән тырыш Флүрә улай ҙа юғалып ҡалмай. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға китә. Йәне-тәне менән уҡыуға сума. Әле китапханала, әле кабинеттарҙа дәреҫкә ентек-

ле әҙерләнеү менән үтә уның биш йыл ғүмере.

Учалы районының Ҡобағош ауылы егете Әхмәр Мөхәммәтдин улына тормошҡа сыға. Йәтим ҡалып, ҡартинәһе ҡулында үҫкән Аҙнабаев, тормош ауырлығын үҙе лә байтаҡ кисергәнлектән, бик кешелекле була. Һәр яҡтан ҡатынына ярҙам ҡулын һуҙа. Бер уйлаһаң, тормош иптәшең танылған ғалим, профессор, Башҡорт дәүләт педагогия институтының фән буйынса проректоры, мәктәптәрҙән алып юғары уҡыу йорттары өсөн тәғәйенләнгән дәреслектәрҙең авторы, етмәһә, 18 йыл Өлкә комитетында эшләгән икән, өйҙә генә ултыр ҙа бит. Юҡ, Флүрә ханым ундайҙарҙан түгел.

Өс бала үҫтерәләр: өлкән ҡыҙҙары Гүзәл Хәмитова врач-терапевт, уртансыһы Булат Аҙнабаев тарих фәндәре кандидаты, БДУ доценты, ә кеселәре — Гөлдәр — Башҡорт дәүләт педагогия институтының художество-графика бүлеген тамамлаған, рәссам.

Ҡатын-ҡыҙға бынан да ҙур бәхеттең булыуы ла мөмкин түгел кеүек. Мөмкин икән.

Ҡыҙҙар кеүек һөйкөмлө, көләс йөҙлө, бер аҙ уҫалыраҡ та күренгән матур ҡатындың, өс бала әсәһенең, ғилем тауҙарын да яулар ҡөҙрәте булған икән дә. Белорет ҡалаһының 1-се урта мәктәбендә рус теле һәм әҙәбиәтенән уҡытҡан сағында Флүрә Аҙнабаеваны «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы редакцияһына бүлек мөхәррире итеп эшкә саҡыралар. «Русский язык в башкирской школе» журналы ойошторолғас, унда яуаплы сәркәтип вазифаһын үтәй. Тап ошо йылдарҙа ул төплө ғилми эштәр менән шөғөлләнә. 1988 йылда Мәскәүҙә кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлағандан һуң, Аҙнабаева башҡорт мәктәптәренең башланғыс синыфтары өсөн рус теле дәреслектәре, төрлө ҡулланмалар, дидактик материалдар, кластан тыш уҡыу китаптары төҙөй. Бөтәһе (авторҙаштары менән) 33 китап нәшер итә, ғилми хеҙмәт яҙа. Өфө ҡала башҡорт гимназияһында Эльконин-Давыдов концепцияһы буйынса үткәрелгән эксперименттар, башҡорт башланғыс мәктәптәре уҡытыусылары өсөн ойошторолған махсус курстар, семинарҙар... Рус теле дәрестәрендә, ҡағиҙәләрҙе үҙләштереүҙән тыш, баланың ижади һәләтен үҫтереү, яңы быуынды тәрбиәләү, күп телдәрҙе өйрәнеү кәрәклеге күҙ уңында тотола. 1986 йылдан бирле үҙе эшләп йөрөгән Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының Белем биреүҙең милли мәсьәләләре институтының Башҡортостан филиалын 1993 йылдан алып етәкләй. 21 ғилми хеҙмәткәрҙе берләштергән филиал менән идара итеү ҙә еңелдән түгел. Мәҫәлән, 7 ай инде уларға хеҙмәт хаҡы түләнмәй. Рәсәй менән Башҡортостан араһында ҡайнай улар, шуға ла финанс мәсьәләһендә ҡыйынлыҡтар тыуып тора. Эш бит: кәйеф тә боҙола, шатлығы ла бар. 2002 йылдың апрель айында Флүрә Фәтхи ҡыҙы Аҙнабаева К.Д.Ушинский миҙалы менән бүләкләнде. Үрнәк уҡыу әсбаптары һәм методик әҙәбиәт әҙерләүҙәге оҙайлы хеҙмәте өсөн бирелде ул. Был миҙал бик һирәктәргә эләгә, хатта ошо өлкәнең хеҙмәт геройҙарына бирелә тип әйтер инем. Башҡортостан халыҡ мәғарифының атҡаҙанған хеҙмәткәре, педагогия фәндәре кандидаты, Башҡортостан халыҡ мәғарифы отличнигы, өс бала әсәһе Флүрә Фәтхи ҡыҙы Аҙнабаеваға идара өлкәһендә эшләүсе ир-егет һыҙаттары хас: аныҡ эш итә, үҙ фекерен яҡлай белә, башҡаларҙы үҙ тирәһенә туплай ала. Психологтар әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ бер нисә эште бер юлы башҡара алыуға һәләтле, ир-аттан ул шуның менән айырыла ла. Флүрә апайҙың үрҙә һаналған эштәренән тыш, республиканың Мәғариф министрлығы, «Башҡортостан уҡытыусыһы» редакцияһы, Башҡортостандың мәғарифты үҫтереү институты коллегияларында ағза булып торғанын иҫәпкә алғанда, тап заман менән берҙәй атлаусы, даусыл рухлы арҙаҡлы шәхесебеҙ күҙ алдына баҫа. Бөтә ғүмерен уҡытыусы һөнәренә арнаған Флүрә Фәтхи ҡыҙы үҙенең хеҙмәте менән быны раҫланы.